“Башҡортостан Республикаһының Ағиҙел ҡалаһы
ҡала округы Үҙәк китапханаһы»
муниципаль автоном мәҙәниәт учреждениеһы

Хеҙмәтләндереү бүлеге

# Ир йөрәкле ил ҡыҙы



# Һәҙиә Дәүләтшина

Ағиҙел ҡалаһы - 2020 йыл

**Төҙөүсе: Әйүпова Ә. Х.**

**Ир йөрәкле ил ҡыҙы Һәҙиә Дәүләтшина: мәғлүмәти буклет / төҙ. Ә. Х. Әйүпова. –Ағиҙел: «БР Ағиҙел ҡалаһы ҠО Үҙәк китапханаһы» МАМУ, 2020.**

**“ Мине яҡшыраҡ белгегеҙ килһә,**
**“Ырғыҙ” романымды уҡығыҙ.**
**Минең бөтөн йәнем , саф**
**йөрәгем шул романда”.**

**Һәҙиә Дәүләтшина**

2020 йылда күренекле башҡорт яҙыусыһы, СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы, Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, сәйәси золом ҡорбаны Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшинаның тыуыуына 115 йыл тула.

Шәхес культы, тоталитар режим осоронда нахаҡҡа хөкөм ителеп, күп йылдар буйы михнәт һәм ғазап сигеп йәшәргә дусар ителеүгә ҡарамаҫтан, үтә ауыр шарттарҙа ул башҡорт әҙәбиәтендә иң яҡшы ҡаҙаныштарыбыҙҙың береһе тип баһаланырҙай аҫыл әҫәр — «Ырғыҙ» романын тамамлай һәм шуның менән ил алдында оло ихтирам яулай.

Һәҙиә Дәүләтшина шәхесе һәм таланты башҡорт донъяһында М. Аҡмулла, Ш. Бабич, М. Буранғолов һымаҡ фажиғәле яҙмышҡа дусар ителгән бөйөк әҙиптәр һәм бөйөк шәхестәр менән бер рәттә тора.

Тәҡдим ителгән мәғлүмәти буклет әҙибәнең донъя күргән әҫәрҙәрен, уның тормош һәм ижад юлын яҡтырта.

Буклет киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнгән.

**ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНАНЫҢ ТОРМОШ ҺӘМ ИЖАД ЮЛЫ**

Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина 1905 йылдың 21 февралендә (яңы стиль менән 5 мартында) Һамар губернаһы Николай өйәҙе Имел олоҫоноң (хәҙерге Һамар өлкәһе Оло Чернигов районы) Хәсән ауылы крәҫтиәне Лотфулла Ильясов ғаиләһендә тыуған.

Һәҙиә Дәүләтшина башта ауылдағы ҡыҙҙар мәҙрәсәһендә уҡый, ә инде Хәсән ауылының Янғол исемле байы балаларын уҡытыу өсөн ҡаланан мөғәллимә алдыртҡас, уның янына йөрөп, дәрестәр ала. Октябрь революцияһынан һуң ауылда асылған яңы мәктәптә уҡыуын дауам итә.

1919 йылда атаһы Лотфулла ағай тиф ауырыуынан донъя ҡуя. Әсәһе Гөлйәүһәр апай, Һәҙиәнән тыш, тағы ла өс бала менән ярҙамсыһыҙ тороп ҡала.

1920 йылда, ун биш кенә йәшлек үҫмер көйөнсә, ошо уҡ Ырғыҙ буйындағы Диңгеҙбай ауылына уҡытыусы итеп ебәрелә. 1921 йылдың аҙағында урындағы Совет органдарының тәҡдиме менән Һәҙиә Дәүләтшина, Һамар ҡалаһына китеп, Башҡорт-татар педагогия техникумына уҡырға керә.



Тиҙҙән, 1922 йылда, партия эшмәкәре, буласаҡ яҙыусы Ғөбәй Дәүләтшинға кейәүгә сыға. Ғөбәй Дәүләтшин ҙур дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре һәм бер үк ваҡытта башҡорт телен камил белгән талантлы яҙыусы булып танылa. 1924-1925 йылдарҙа бер йыл самаһы педагогия рабфагында уҡый. 1926 йылда «Башҡортостан йәштәре» (хәҙерге «Йәшлек») газетаһын 12 март һанында тәүге проза әҫәре – «Һылыуҡай - пионерка» тигән

хикәйәһе донъя күрә. Унын артынса күләмле әҫәр - «Айбикә» исемле повесын тамамлап, 1930 йылда «Октябрь» (хәҙерге «Ағиҙел») журналында баҫтырыла.
1934 йылда Һ. Дәүләтшинаға Башҡортостан яҙыусылары делегацияһы составында СССР яҙыусыларынын Í Бөтә Союз съезында ҡатнашыу насип була.




1935 йылда ул К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтынын тел һәм әҙәбиәт факультетына килеп, унын ике курсын бик яҡшы билдәләр менән тамамлай. Студентка Һ. Дәүләтшина 1936 йылда Өфө ҡалаһы Ленин район Советына депутат, Советтарҙын ғәҙәттән тыш X Бөтөн Башҡортостан съезына делегат итеп һайлана.
1935 йылда баҫылып сыҡҡан «Һырға һабағы» исемле һоҡланғыс хикәйәһе менән әҙибә ҙур проза оҫтаһы булараҡ ныҡлы танылыу таба. Шул уҡ осорҙа һуңынан кин билдәле «Ырғыҙ» романы итеп үҫтерелəсәк «Ялҡынлы йылдар» тигән повесть өҫтөндә эшләй башлай. 1935-1937 йылдарҙа Һ. Дәүләтшина «Ялҡынлы йылдар» повесынын бер нисә варианты яҙа.

1937 йылдын 20 ноябрендә Һәҙиә Дәүләтшинаны, йәнәһе, Ватанға хыянат итеүсенен ғаилә ағзаһы тип ғәйепләп, ҡулға алалар һәм ул НКВД-нын Махсус кәнәшмәһе ҡарары менән 5 йылға иркенән мәхрүм ителә. (Бынан бер нисә ай элек Ғөбәй Дәүләтшин ҡулға алына. 1938 йылда ул нахаҡҡа үлем язаһына хөкөм ителә һәм атып үлтерелә.) Һ. Дәүләтшина 1942 йылдын октябренә тиклем Мордовиянын Темников лагерҙарында ултырып сыға. Башҡортостанға ҡайтып Стәрлетамаҡта йәшәй, унан, Өфөгә килеп, ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтына төнгө ҡарауылсы булып урынлаша. Ошо ваҡыттан ул 1937 йылда ҡулға алыныу арҡаһында бүленеп ҡалған романы

өҫтөндә эшен дауам итә. 1945 йылда Һ. Дәүләтшина Зәйнулла Сафинға кейәүгә сыға. 1942-1952 йылдарҙа Һ. Дәүләтшина «Ырғыҙ буйҙарында» романының йәнә бер нисә вариантын яҙа.

Һәҙиә Дәүләтшинаның романы «Ырғыҙ» тип тамамлана. Ләкин, үкенескә күрә, Башҡортостан Яҙыусылар союзының, ул саҡтағы «Әҙәби Башҡортостан» (хәҙерге «Ағиҙел») журналының ишектәрен күпме генә шаҡыһа ла, иң ҡәҙерле әҫәренең үҙе иҫән саҡта баҫылып сыҡҡанын күрергә насип булмай. Үҙе үлгәс, яҙыусының шәхси архивы намыҫһыҙ ҡәләмдәше ҡулына эләгеп, бик күп ҡулъяҙмалары, шул иҫәптән көндәлек яҙмалары, архивҡа тапшырылмайынса, әләф-тәләф ителә, Башҡортостан Яҙыусылар союзының ул саҡтағы етәкселәре әҙибәнең мираҫына ҡул һуҙыусыларға ҡарата эшлекле саралар күрмәй. Шул сәбәпле һуңынан, илдә демократия тулҡындары ҡуҙғалыу




менән, матбуғатта Һ. Дәүләтшинаның «Мораҙым» исемле күләмле проза әҫәренең ҡулъяҙмаһы кем тарафынан урланыуы мәсьәләһе ҡалҡып сыға.

Һәҙиә Дәүләтшина 1954 йылдың 5 декабрендә, 50-се йәшендә, Башҡортостандың Бөрө ҡалаһында үпкә ауырыуынан вафат була. «Ырғыҙ» романын нәшриәттә баҫып сығарыу өсөн яҙыусының рухи ҡорҙашы, яҡташы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти әҙерләне. Әҫәр тәү башлап 1957 йылда донъя күрҙе, артабан ул тиҙ арала рус теленә, шулай уҡ башҡа телдәргә тәржемә ителде, башҡорт уҡыусыларының иң яратҡан әҫәренә әйләнде, бөтөн ил күләмендә популярлыҡ яуланы. 1967 йылда Һәҙиә Дәүләтшина «Ырғыҙ» романы өсөн (үлгәндән һуң) Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев иисемендәге премияһы бирелде.…?

## БИБЛИОГРАФИЯ

**Айбикә: повесть һәм хикәйәләр . –Икенсе баҫма. – Өфө: Башҡ. китап нәшр., 1987. – 184 б.;**

**Ыргыз: роман / башк. тәрж.. – Казан: Татар. китап нәшр., 1988. – 416 б.;**

**Иргиз : роман / пер. с башк. В. Василевского. – Уфа: Башк. китап нәшр., 1988. – 440 с.;**

**Шафиков Г. Дочь Иргиза // Шафиков Г. И совесть, и жертвы эпохи :их память народа хранит: портреты. – Уфа: Башк. кн. изд-во, 1991. – С. 53-72;**

**Шафиков Г. Г. Цена земли и слова: об иргизо – камаликских башкирах и Хадие Давлетшиной // Шафиков Г. Г. Дыхание жгучее истории. – Уфа: Китап, 1998. – С. 88-100;**

**Шәкүр Р. Һәҙиә Дәүләтшина // Шәкүр Р. Арҙаҡлы башҡорттар: гилми-биографик очерктар. – тулыланд. 2-се баҫмаһы. – Өфө : Китап, 2005. – Б. 289 -295;**

**Һәҙиә Дәүләтшина. Тормошо һәм ижады / Төҙ. Г. Н. Ҡасҡынова. – Өфө : Китап, 2010. – 160 б.;**

**Ғайсарова-Ғиззәтуллина Г. Һәҙиә:[ роман] / Г. Ғайсарова-Ғиззәтуллина //Тормош шау сәскәлә:роман, повесть һәм хикәйәләр. –** Өфө: Китап, 2007. – 3-148 б.

Мәғлүмәт сығанағы: https://askinskajanov-b.rbsmi.ru/news/-i-d-l-tshinany-tormosh-m-izhad-yuly

## ***БЕҘҘЕҢ АДРЕС:***

***452920, Ағиҙел ҡалаһы,***
***Беренсе төҙөүселәр ур., 7 А***
***Тел.: (34731) 2-73-56,***
***E-mail: mukcbs55@mail.ru***
***http://agidellib.***

## ***БЕҘ ЭШЛӘЙБЕҘ:***

***Үҙәк китапхана***
***Эш сәғәте: 10.00 – 19.00***
***Төшкө тәнәфес : 13.00 – 14.00***
***Ял көнө: шәмбе***

***Ағиҙел ҡалаһының тарихи-тыуған яҡты өйрәнеү музейы***
***Эш сәғәте: 10.00 – 19.00***
***Төшкө тәнәфес: 13.00 – 14.00***
***Ял көнө: шәмбе***

***Балалар моделле китапханаһы***
***Эш сәғәте: 10.00 – 19.00***
***Төшкө тәнәфес: 13.00 – 14.00***
***Ял көнө: шәмбе***